

# Яугир сәсән мираҫынан

*Бер нисә йыл элек “Башҡортостан” гәзитендә “Яҡуповы Яҡупов та, ул һуң ҡайһы яҡ була?” тигән яҙмам баҫылғайны. Унда һүҙ башҡорт халҡының тарих төпкөлөнән мәғлүм ватансылыҡ һәм ҡаһарманлыҡ традицияһына тоғро ҡалыуын раҫлап, 112-се атлы дивизиябыҙ Дон буйында немец фашистары менән йән аямай һуғышҡан дәүерҙә шул данлы ғәскәребеҙҙе хеҙмәтләндергән “Ҡыҙыл атлылар” гәзитенең мөхәррире, күренекле яҙыусыбыҙ Али Карнай ҡулына “Дон далаларында” тигән бәйет килеп юлығыуы, үкенескә ҡаршы, уның авторы хаҡында шул әҫәрҙә “Ҡыҙылармеец Яҡупов Башҡортостан иленән” тип әйтелгәндән башҡа ошоғаса бер ни мәғлүм булмауы, әле генә мәсьәләгә асыҡлыҡ индерелеүе хаҡында барғайны. Баҡтиһәң, ул хәҙерге Стәрлебаш районындағы Ибраҡай ауылында 1905 йылда тыуған Мөхәмәтшакир Нәҙерша улы Яҡупов тигән уҙаман булған икән. Был хаҡта башта сала-сарпы ғына “Башҡортостан” гәзитенең баш мөхәррире Рәлиф Кинйәбаевтан ишеткәйнем. Аҙаҡ уның менән бергә Ибраҡайға юл төшкәйне. Шунда яугир сәсәндең ҡыҙы Мәғүзә апай һәм уларҙың ҡәрҙәше Идик Яҡупов менән әңгәмәләшергә насип булды.*

*Ауыл мәктәбендә һәм Идикта сәсәндең яҙмаларының ҡайһы бер күсерәктәре һаҡланған икән. Улар менән дә танышырға форсат булды. “Башҡортостан”да баҫылған яҙмамда шул хаҡта ла әйтелгәйне.*

*Сәсәндең беҙгә килеп еткән яҙма мираҫы араһында (ә уларҙың барыһын да, рәхмәт төшкөрө, Идик Яҡупов һаҡлап алып ҡалған) шиғыр, бәйет һәм таҡмаҡтар бар. Аҡ ҡағыҙға теркәлеүҙәренә быуатҡа яҡын ваҡыт үтеп китһә лә, бөгөнгө уҡыусы күңеленә улар ҙа хуш килер, моғайын.*

## Дон далаларында

Бирге яҡта иҫкән елдәр
Арғы яҡта иҫерме?
Иҫкән елдәр сәләмемде
Илемә алып китерме?
Ҡыҙылармеец Яҡупов
Башҡортостан иленән.
Яҙам ошо бәйетемде,
Яраланғас билемдән.
Иҫән булһам, Тыуған илгә
Бер әйләнеп ҡайтырмын,
Беҙҙең баштан үткәндәрҙе
Телем менән әйтермен;

Ғәзиз балаҡайҙарымды
Ҡыҫып-ҡыҫып һөйөрмөн,
Үҙебеҙҙең күргәндәрҙе
Бәйнә-бәйнә һөйләрмен.
— По вагонам! — ҡысҡырҙылар
Башҡорт балаларына,
Май башында килеп төштөк
Ефрим ҡалаларына.
Һандуғастар һайрай ине
Ул ерҙең урманында.
Фашистарҙы ҡырып һалдыҡ
Шул ауыл урамында.

Олым буйы матур икән,
Арыш етеп килгәндә.
Күп немец башына еттек,
Безгә ҡаршы килгәнгә.
— Башҡорт атлылары, алға! —
Тип команда бирелде. —
Әйҙә, егет, ҡыу дошманды,
Ҡотҡар Тыуған илеңде!
Көн барҙыҡ беҙ, төн барҙыҡ,
Дошманды плен алдыҡ,
Бирелмәгәндәрен ҡырып,
Юлдарға түшәп һалдыҡ.
Күп егеттәр был һуғышта
Ранен булып киттеләр.
Тыуған ил өсөн егеттәр
Үҙен ҡорбан иттеләр.
Барыбыҙ бер семья булып,
Күгәрсендәй гөрләшеп,
Йәшәнек беҙ, батыр дуҫтар,
Күмәкләшеп, берләшеп.
Фронтты өҙөп, дошмандың
Артынан төшөп алдыҡ.
Осраған һәр бер ерҙә
Дошманды ҡырып һалдыҡ.
Яланды үлән ҡаплаған,
Үләнде ысыҡ ҡаплаған.
Беҙҙең ерҙе мыҫҡыл итеп,
Дошман килеп тапаған.
Пушкаларҙан да аттыҡ беҙ,
ПТР-ҙан да аттыҡ беҙ.
Ҡаршы килгән танкыларҙы
Селпәрәмә ваттыҡ беҙ.
Ҡаты торҙоҡ беҙ, боецтар,
Бер кем артҡа сикмәне.
Үлһә, үлде беҙҙең яугир —
Урынын ташлап китмәне.
Комэскадрон Ибраһимов
Безгә команда бирҙе:
— Эскадрон, атакаға! — тип,
Яңғыратып бар ерҙе.
Күп тапҡырҙар атакаға
Алып барҙы ул беҙҙе,
Өс тапҡыр яраланһа ла,
Ҡалдырманы ул беҙҙе.
Беҙҙең йөрәктә ҡайнайҙыр
Уттай асыу дошманға —
Үс алайыҡ дошмандарҙан,
Үтәп халыҡ ҡушҡанды.
Кемдер дошман тылына
Ҡурҡыуһыҙ барып инә,
Кемдер дошман турында
Хәбәрҙәр алып килә.
Һыуға төшһә, батмайҙар,
Утҡа төшһә, янмайҙар,
Атһа, яҙа атмайҙар,
Бурысты үтәмәй ҡайтмайҙар.
Стәрлелә ҡарбуз үҫә,
Алма үҫә Бөрөлә.
Янғантауҙан ҡараһаң,
Беҙҙең Өфө күренә.
Урал тауының йәмен,
Иҙел һыуының тәмен,
Шылтырап шишмә ағыуын,
Кисен ҡояш байыуын,
Халҡыбыҙҙың азатлығын,
Гүзәл тормош ҡороуын,
Беҙҙең йәшәү гөлдәргә тиң
Сәскә атып тороуын, —
Барыһын яҡлап, егеттәр,
Атакаға ташландыҡ;
Ошо ерҙә дошманды беҙ
Сигендерә башланыҡ.
Алты дошман һалдаты
Ҡыуаҡлыҡтан сыҡтылар,
Алтыһы ла миңә ҡарап,
Автоматтан аттылар.
Бик һағынған саҡтарҙа
Тулған айға ҡарағыҙ.
Тыуған илдең ирке өсөн
Атакаға барабыҙ.
Беҙҙең йәмле илебеҙҙе
Дошман күҙе күрмәһен,
Беҙҙең гүзәл еребеҙҙе
Дошман тапап йөр(ө)мәһен!
Дошман хәҙер аҡтыҡ көсөн
Йыйып ҡаршылыҡ итә.
Беҙҙең урамда ла, дуҫтар,
Байрам көндәре етә.
Эй, туғандар, боецтар,
Хуш, иҫән-һау булығыҙ.
Еңеүҙәргә алып сыҡһын
Бара торған юлығыҙ!

## Мәрзиәгә хат

Һағ(ы)нып һеҙгә, Мәрзиәкәй, [яҙам]
Күңелемдең нескә еренән.
Һеҙҙән айырылып, яңғыҙ башым
Йәм тапмайым йөрөгән илемдән.
Йөр(ө)гән илемдә күп ҡатын-ҡыҙҙар,
Барыһы — ят, һис юҡ яҡыны.
Бер(е)һе-бер йыуатмай күңелемде,
[Һеҙгә генә йөрәк ялҡыны].
Һеҙ инегеҙ илдә саҡтарымда
Минең хәлдәремде белеүсе,
Тормошома йәнле дәрт биреүсе,
Минең өсөн өҙөлөп көйөүсе.
Хәтеремдә йәмле йәй көнөндә
Һинең менән картуф күмгәндәр,
Тирләп, бешеп ҡояш нурҙарынан,
Бергә төшөп, һыуҙа йөҙгәндәр.
Туҡта, сәләм яҙып бөтмәҫ элек,
Әлләнизәр яҙа башланым.
Хат яҙайым, тиһәм, бутала шул
Төрлө уйҙан ғәзиз башҡынам.
Һағынышлы сәләм балаларға,
Теләйем сәләмәтлектәрен.
Рәхәт, шатлыҡ күреп йәшәһендәр,
Күрмәй донъя этлектәрен.
Таҙа булып үҫеп, ҙурайһындар.
Ҡайтыуыма ҡаршы алырҙар.
Ололары таныр, кескәйҙәре
Ғәжәпһенеп ҡатып ҡалырҙар.
Ағай-эне, дуҫ-иш, һорағанға
Минән бик күп сәләм әйтерһең,
Тормоштары уйнап-көлөп кенә
Шатлыҡ менән үтһен, тиерһең.
Сәләм һеҙгә Ҡыҙыл Армиянан,
Күп ҡан һеңгән фронт еренән,
Сәләм һеҙгә эшсән Дон иленән,
Көслө һуғыш барған иленән.
Шуның менән сәләм тамам һеҙгә —
Теләгемде теләп бөтөрҙөм.
Тағы ни хәбәрҙәр яҙайым, тип,
Бер аҙ ваҡыт уйлап ултырҙым.
Минең хәлде беләһегеҙ килһә,
Иҫән генә хеҙмәт итәмен.
Иҫән-һау ҡайтыуымды теләгеҙ,
Һеҙҙән шундай теләк көтәмен.
Минең хеҙмәт хәҙер шунан тора:
Кис һәм көндөҙ поста торамын.
Шикле кешеләрҙе ҡулға алып,
Үтәү өсөн приказ ҡушҡанын.
Ил байлығын, тылдың тыныслығын
Һаҡлау өсөн хеҙмәт итәбеҙ.
Бөгөн бында, ә иртәгә ҡайҙа
Приказ ҡушһа, шунда китәбеҙ.
Дондан ары көслө һуғыш бара,
Яңғ(ы)рап тора атыш тауышы.
Эх, Мәрзиәм! Бик тиҙ генә булмаҫ
Һеҙҙең менән бергә ҡауышыу.
Бәлки, тағы һуғышҡа керербеҙ,
Белеп булмай [әле] алдағын.
Әле ныҡлы төҙәлеп бөтмәгән
Йәрәхәтле ике бармағым.
Яҙ етеүгә, бәлки, һуғыш бөтөр,
Көн йәмләнгәс, ҡайтып етербеҙ.
Күргән ҡыйынлыҡты артҡа ташлап,
Һеҙҙең менән байрам итербеҙ.
Еңеү көнө булыр беҙҙең байрам,
Дошман өсөн булыр еңелеү.
Ҡыҙыл ғәскәр һәр көн алға бара,
Юҡ бер аҙым артҡа сигенеү.
Ҡыйрат, Ҡыҙыл ғәскәр, (дошман) яуын,
Яҙ ҙа етмәҫ, илдән ҡыуырбыҙ.
Йәрәхәттән аҡҡан ҡандарыңды
Висла йылғаһында йыуырһың.
Үҙегеҙҙән бер ҙә хат алған юҡ,
Мин белмәйем, нисек хәлегеҙ.
Иҫәнмеһең үҙең, балаларым,
Именме йорт, ил һәм малыбыҙ?
Ағай-эне, дуҫ-иш иҫән микән,
Ни эш бөтөрәгеҙ колхозда?
Ни нәмәлә тормош ауырлығы?
Ярҙам итәләрме ат менән?
Ниндәй ҡыйынлыҡтар кисерәһең,
Яҙып, белдереп тор хат менән.
Яҙған хатым илтеп һаламын да,
Тиҙҙән үҙегеҙҙән хат көтәм.
Хуш, Мәрзиә, пока! Ҡулың ҡыҫам,
Мин винтовка алып пост китәм.

Хатты көйләп яҙған, тип, ғәйепләмәгеҙ. “Сәләм-хат” көйөнә көйләп уҡығыҙ.

Мәғлүм булһын. Үҙем бик яҡшы хеҙмәт итеп йөрөйөм. Йылы кейемдәр алдыҡ: куртка, бүрек, быйма, йылы салбар, силғау, подшлемник, бейәләй. Тик йылы күлдәк кенә алмағанбыҙ әле. Шинелдең яурынына мамыҡ һалып, һырытып алдым. Ашау яҡшы. Теләгәнсә етерлек. Даже икмәк артып ҡала. Яҡындан иптәштәр юҡ. Үҙем кис һәм көндөҙ бишәр сәғәт поста торам... Фронттан 5—6 километр артта Дранкино [тигән] ауылда ятабыҙ.

Тағы ауылда ниндәй яңылыҡтар бар? Зариф менән Ғәли туғандарҙың (бер туғандары: Зариф һуғыштан ҡайтып, Күмертауҙа йәшәп, шунда донъя ҡуя, Ғәлигә ҡайтыу насип булмай, һуғышта һәләк була. — ***Идик Якупов иҫкәрмәһе***) хат-хәбәрҙәре бармы? Айырып яҙығыҙ.Үҙегеҙҙән июль айында яҙған хатығыҙҙан башҡа хат алғаным юҡ. Бик күп хәбәр яҙып, иҫәнлегегеҙҙе белдереп, хат яҙып тороғоҙ. Минең яҙған хаттар барамы икән, айырып яҙығыҙ. Нимәләр һуйҙығыҙ һуғымға? Ниндәй малдар аҫырарға уйлайһығыҙ? Ашау яғы нисек?

Был хатты ошонда тамамлап булыр.

*Шәкерт сағындағы дәфтәренә яҙғандарынан*

## Эй, әсәйем!

Эй, әсәйем! Сәләм яҙҙым,
Һағынып бик зарҙар булғас.
Һағынһаҡ та, күрешә алмайбыҙ,
Арабыҙ бик йыраҡ булғас.
Һауала һайрайҙыр ҡоштар,
Уларҙы күреп, ғәзиз баштар,
Һағынып түгелер йәштәр,
Сабырлыҡ бирһен үҙе Алла!
Яҙа-яҙа һүҙем бөтмәҫ,
Ҡағыҙ менән ҡара етмәҫ.
Хәсрәтем минең бөтмәҫ,
Сабырлыҡ бирһен үҙе Алла!
Тыуған илдән сығып киттем,
Йәшем ун дүрттәргә еткәс,
Ҡайтыуҙары ҡыйын икән,
Тыуған илдән сығып киткәс.
Мөнәжәтте яҙа-яҙа,
Ҡәләм тотҡан ҡулым тала.
Күҙҙәремдән йәшем аға,
Морат бирһен үҙе Алла!
Ҡәләм алһам, яҙып булмай,
Тәҡдирҙәрҙән уҙып булмай.
Тыуған илдән айырылғас,
Иламайса, түҙеп булмай.
Сығыр инем, йөрөр инем,
Тыуған-үҫкән ерем булһа.
Асыр инем, уҡыр инем,
Китап-шәрифтәрем булһа.
Мөнәжәтем яҙа-яҙа,
Ап-аҡ йөҙөм ҡара була.

Хоҙай тәҡдире менән
Иманлы юлдаштар була.
Самауырҙы ҡайнатырға
Кәрәк имән күмере.
Һәҙиә итеп биргәндең
Ҡыҫҡа икән ғүмере.
Хоҙай насип итер микән,
Был ҡайғылар бөтөр микән?
Бәнем ғәзиз ғүмерҙәрем
Һаман шулай үтер микән?
Ер еләге әсе була,
Йомарланып бешмәһә.
Кеше хәлен кеше белмәй,
Үҙ башына төшмәһә.
Бейек тауҙың башына
Быяла мәсет кем һалған?
Эсем ялҡын, тышым һалҡын,
Был хәсрәтте кем һалған?
Алмағастың алмаһы
Әсе була, бешмәһә.
Янмаҫ инем, көймәҫ инем,
Әсәм иҫкә төшмәһә.
Ат бәйләнем кәртәгә,
Тал тамырын өҙөргә.
Һин, әсәйем, иҫемә төшһәң,
Үҙәккәйем өҙөлә.
---
Быны яҙғанда ҡыш ине,
Ҡәләмем ҡамыш ине.
Ғәйеп итмәгеҙ, туғандар,
Ҡәләмем килешмәне.

## Башҡортостан

Башҡортостан уртаһында
Беҙҙең Ырымбур ҡалаһы.
Арыҫлан килһә, ҡаршы тора
Беҙҙең башҡорт балаһы.
Урал тауының башында
Беҙҙең башҡорт флагы.
Бөгөнгө көн хасил булды
Беҙҙең башҡорт теләге.
Ҡаруанһарай мәсете
Ырымбур ҡалаһында.
Бөтмәҫ ғәйрәт, бөтмәҫ һиммәт
Беҙ — башҡорт балаһында.
Һис тә дошмандан ҡурҡмайбыҙ,
[Туҡмайбыҙ үс ҡанғансы].
Илебеҙҙе [беҙ] һаҡлайбыҙ,
Бер тамсы ҡан ҡалғансы.
[Баҙарҙарҙан, йәрминкәнән]
Алдым итек-барбарис.
Башҡорт — арыҫлан балаһы,
Башҡорт — ҡаплан, юлбарыҫ...

## Тырышайыҡ беҙ, шәкерттәр

Беҙ, шәкертәр, уҡып һабаҡ,
Ҡайһыбыҙҙы ҡылабыҙ аҡ.
Ярҙам бирһен беҙҙәргә Хаҡ!
Тырышайыҡ беҙ, шәкерттәр.
Һабаҡ уҡыу, шәкерттәш,
Кәрәк оло, кәрәк көс.
Һабаҡ уҡыр яҡшы кеше,
Тырышайыҡ беҙ, шәкерттәр.
Беҙҙәр керҙек яҡшы юлға,
Ғилемлекте алайыҡ ҡулға.
Диҡҡәт итеп уңға, һулға,
Тырышайыҡ беҙ, шәкерттәр.
Гүзәл йөрөр беҙҙең мәктәп,
Һәр бер төрлө китаптар күп.
Файҙа алайыҡ беҙ уҡып,
Тырышайыҡ беҙ, шәкерттәр.
Беҙ уларҙан һис кәм түгел,
Уҡыйыҡ һабаҡ, биреп күңелең.
Һәр нәмәне бик асыҡ бел,
Тырышайыҡ беҙ, шәкерттәр.
Милләт хеҙмәт көтөр беҙҙән.
Төшһөн бурыс үҙебеҙҙән.
Файҙа юҡтыр ҡоро һүҙҙән.
Тырышайыҡ беҙ, шәкерттәр!

## Был нурлы мәктәп

Был нурлы мәктәп,
Уҡыйыҡ күмәкләп,
Булайыҡ беҙ шәп.
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Был көн: “Наҙанлыҡ —
Бик ҙур яманлыҡ”, —
Тип беҙ уяндыҡ.
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Ғәзиз милләткә,
Ихлас хеҙмәткә,
Тауҙай һиммәткә.
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Уҡыйыҡ, туғандар —
Уҡыр замандар,
Янһын яһилдар.
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Бөтһөн наҙанлыҡ,
Бер булһын халыҡ!
Бергә ҡуҙғалып,
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Дошман өсөн дә
Ғафил кисенмә,
Көндөҙ, кисен дә
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Беҙ йәш булһаҡ та,
Уҡыйыҡ йәш саҡта,
Ҡалмайыҡ артта.
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Төрөк, татарҙар
Артта ҡалғандар.
Ошо замандар
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Төрөк арыҫлан
Исемен алған
Үткән бер заман.
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Шулар ҡанынан —
Беҙҙәр, әй, туған,
Уян, тиҙ уян!
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!

Барсабыҙ бергә,
Кәрәк берегергә
Ғилем бар ергә.
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Ғүмерҙәр ҡыҫҡа —
Ятмайыҡ бушҡа.
Яҙ ҙа һәм ҡыш та
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Йөр(ө)мәйек уйнап,
Урамдар буйлап.
Киләсәкте уйлап,
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!

Уҡымағандар —
Фәкирҙәр улар,
Бушҡа ҡалғандар.
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Рәхәт күралмай,
Бер ни уйламай,
Йөрөй хайуандай.
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!
Тиҙерәк алға
Кәрәк атларға,
Кәрәк ятларға.
Уҡыйыҡ, шәкерттәр!

## Мәҙрәсә менән хушлашыу

Эй, һөйөклө мәҙрәсәбеҙ,
Нисек ташлап китәбеҙ?
Хәҙер сығыр ваҡыт етте,
Инде ни хәл итәбеҙ?
Һабаҡташтар һәм дуҫ-иштәр,
Хуш, имен-һау булығыҙ!
Мәҙрәсәнән сыҡҡандан һуң,
Изге булһын юлығыҙ!
Беҙ уҡыныҡ, арыманыҡ,
Арыманыҡ, талманыҡ.
Әлхәмделиллаһи шөкөр!
Дәрестәр ҡалдырманыҡ.
Мөғәллимдәр һәм дуҫ-иштәр,
Хуш, иҫән-һау булығыҙ!
Мәҙрәсәнән сыҡҡандан һуң,
Хәйер-доға ҡылығыҙ.
Беҙ уҡыныҡ синыфтарҙа,
Аҡкош кеүек теҙелеп.

Һай, афарин остаздарға!
Өйрәттеләр өҙөлөп.
Яҙҙар етте, тамсы тама,
Ҡоштар тауышланалар.
Март та бөттө, апрель етте,
Дәрестәр ташланалар.
Эй, туғандар, айырылабыҙ
Был ваҡытта инде беҙ.
Айырылыу, һай, айырылыу, һай,
Бик ҡыйын ул, белегеҙ.
Был ваҡытта хәлфә, шәкерт —
Һәммәбеҙ бергә инек.
Уҡый инек шатлыҡ менән,
[Бер ҡайғы белмәй] инек.
Бөттө хаҡлыҡ, бөттө шатлыҡ —
Хәҡиҡәтте яҡлағыҙ,
Йыйылығыҙ, ҡуҙғалығыҙ,
Әйҙә, алға атлағыҙ!

*Был шиғырҙың аҫтында “Яҙҙым 1923 йыл мартының 15-ендә. Шакир Яҡупов” тигән иҫкәрмә бар.*

## Мөхәббәт таҡмаҡтары

Алма ағасы сәскә атһа,
Урам күренмәҫ ине.
Һин яныйға ҡушылмайса,
Күңел һүрелмәҫ инде.
Герман аттарының ялы
Майлап тараған кеүек.
Һин яныйҙың тауыштары
Былбыл һайраған кеүек.
Ырымбурҙан ҡауын килгән,
Бисмилла итеп, ауыҙ ит.
Һөйәм, һөйәм, тип әйтәһең,
Бер һүҙемде ҡабул ит.

Бейек тауҙың баштарында
Үҫеп килә аҡ ҡайын.
Беҙ урамдан үткән саҡта,
Сығарһығыҙ, янҡайым.
Алма үҫтерһәм, белер инем
Алманың ағастарын.
Фал астырһам, белер инем
Һөйөүең хаҡлыҡтарын.
Аҡлы һаплы бәке алдым,
Алма бүләрем, тиеп.
Хафаланып йөрөгән инем,
Күрмәй үләмен, тиеп.

Осоп барған һандуғастар
Ҡунарына тал тапмай.
Йәр табалмағандан түгел,
Башҡа йәрҙе тән тартмай.
Ҡаҙ балаһы йолҡоп ашай
Йәшел сыҡҡан үләнде.
Хоҙай насип итер микән
Саф ҡарашлы гүзәлде.
Ҡулдарыңда көмөш йөҙөк,
Береһен генә миңә бир.
Һөйөү күңелем һиңә бирҙем,
Һин дә күңелең миңә бир.
Ҡулыңдағы көмөш йөҙөк
Уңға, һулға әйләнһен,
Сәстәрем һиңә бәйләнһен,
Хоҙайым насип итһен.
Стәрленең юлдарында
Саҡырым һайын бер тирәк.
Ғишыҡ тотоп ҡауышҡандар
Был донъяла бик һирәк.
Беләҙегеңдең шәүләһе
Төштө, яныйым, битемә.
Әй, яныйым, ғишҡың ҡаты
Төштө бөтә тәнемә.
Барма, яныйым, һыу буйына,
Яр ишелеп, төшәрһең.
Һулаған һулышым һайын
Иҫтәремә төшәһең.
Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?
Һөйөп, белгертмәйһеңме?
Үҙ-үҙеңде ҙурға һанап,
Әллә тиң күрмәйһеңме?
Һандуғастар килеп һайрай,
Төн уртаһы ауышҡас.
Хатҡа яҙып, һүҙҙәр бөтмәй,
Бөтөр әле ҡауышҡас.
Һары башлы, һары түшле
Һандуғастың балаһы.
Өҙөлөп яҙған йырҙарымды
Ҡабул ҡылып алаһы.
Тәҙ(е)рә төбөм гөл генә,
Сәскәләре бер генә.
Һинең кеүек булһа, булыр
(Э)рәсәйҙә бер генә.
Етегән йондоҙ ҡойроғо
Күренә йәйге таңдарҙа.
Йәнекәйем, йыр йырлайым,
Йөрәккәйем янғанға.
Былбыл һайрай талдарҙа
Йәйге матур көндәрҙә.
Былбыл кеүек мин дә һайрим
Һине күргән көндәрҙә.
Йәш егеттәр ҡурай уйнай,
Көйөн оталмам инде.
Һин онотһаң, оноторһоң,
Мин оноталмам инде.
Түбән осҡа барған саҡта,
Яныйым, беҙгә лә кер.
Һүҙҙәребеҙ бөткәнсе, беҙ
Һөйләшербеҙ микән бер?
Алтын алҡа ҡолаҡта,
Тамсылары беләктә.
Үҙең, иркәм, бик йыраҡта —
Мөхәббәтең йөрәктә.
Ҡашың менән күҙеңде,
Мин һөйәмен үҙеңде.
Мин һөйгәнде һин шунан бел:
Ала алмим күҙемде.
Ҡулыңдағы беләҙегең
Секретный бикләнә.
Башҡа йәрең барҙыр, тиеп,
Күңелдәрем шикләнә.
Күгәрсендең балалары
Аҡ ҡына ла күк кенә.
Ах, йәнейем, һин бит миңә
Күҙ нуры кеүек кенә.
Һандуғастың балалары
Баҫып һайрай тирәктә.
Мөхәббәтең бигерәк ҡаты,
Ҡан төшөрҙө йөрәккә.
Телеграмм бағанаһын
Аҡҡа буятыр инем.
Ҡосаҡлап йоҡлатыр инем дә,
Үбеп уятыр инем.
Тибрәтегеҙ, тибрәтегеҙ,
Тибрәтегеҙ ҡайынды.
Илатмағыҙ, йыуатмағыҙ,
Минең яныҡайымды.
Беҙҙең урам — киң урам,
Теҙелгән телеграмм.
Уйламаһам ғына, түҙәм,
Уйлаһам, тиле булам.
Яныҡайым, һин генәһең
Күңелемдең көҙгөһө.

Һин генәһең, бер генәһең
Йөрәгемде өҙөүсе.
Ибраҡай урамдары
Эҙмәле лә эҙмәле.
Яныҡайым, ҡауышырбыҙ —
Өмөтөңдө өҙмә әле.
Сабаталарҙың йүкәһе
Ҡайһы урманда һуйылған?
Ҡисә бигерәк һурып үптем —
Ирендәрем ярылған.
Ҡыҙыу ураҡ урғанда,
Ҡолаҡтарым тирләйҙер.
"Ҡисә кемдән үптерҙең?" — тип,
Әнкәй мине тиргәйҙер.
Һары атым һаҙ буйында,
Ҡамыҡҡайы муйынында.
Үлһәм, үләм, шаһит булам
Һин, яныйым, ҡуйынында.
Урманда ағас күп булыр,
Мин киҫкәне бер булыр.
Илдә матур күмәк булыр,
Йән һөйгәнең бер булыр.
Минең еккән атымдың
Маңлайында ағы бар.
Ғалимлығың баштан ашҡан,
Матурлығың тағы бар.
"Уф, Алла!" — тип һыуҙар алһам,
Һыу ситтәре болғана.
Һин яныйҙы үбә-үбә,
Башым булды диуана.
Екһәң, аттың ек ерәнен,
Ҡрандастың тәрәнен.
Ғүмер ике килмәй, тиеп,
Һөйҙөм йәрҙең сибәрен.
Баҡса тулы сөгөлдөр —
Һөйгән ашым түгелдер.
Йәр өҫтөнә йәр һөйөргә
Башым ике түгелдер.
Өй артында алмағас,
Ҡиҫтем, алма булмағас.
Ятһам, йоҡоларым килмәй,
Һөйгән йәрем булмағас.
Тәҙ(е)рәнең төптәрендә
Гөлдәр тора теҙелеп.
Һин, яныйым, иҫкә төшһәң,
Илайым мин өҙөлөп.
Күктә осҡан аҡкошто
Нисек итеп тотайым?
Йәштән үк һөйгән йәремде
Мин нисек онотайым?
Һандуғастар һайрайҙыр,
Ҡуныр талын яратып.
Һинең өсөн мин йөрөймөн
Төнө буйы йән атып.
Йүгерә-йүгерә йыялманым,
Ер еләге бешкәндә.
Ергә ятып мин илайым,
Яный иҫкә төшкәндә.
Туғайҙарҙа бер йәм дә юҡ,
Муйыл сәскә атмағас.
Көндөҙ күреү менән түгел —
Кис ҡуйында ятмағас.
Тәҙ(е)рәлә һүрендең,
Алам тиеп, үрелдең.
Ожмахтағы хурҙар кеүек,
Күҙҙәремә күрендең.
Йәнекәйем, яулығыңа,
Уттар төшөп, янмаһын.
Йәнекәйем, ҡулбашыңа
Яттар ҡулын һалмаһын.
Бейек тауҙың итәгендә
Һөймәгәндәр һөйһөндәр.
Беҙ һөйгәнгә һөйкәлмәгеҙ —
Бар бит беҙ һөймәгәндәр.
Уфа ҡайҙа, Уфа ҡайҙа?
Уфа Алкиндан ары.
Кемдәр өсөн өҙөләһең —
Алһыу йөҙҙәрең һары.
Һыу буйында күп йөрөнөм
Биҙ(е)рәләрем менән.
Ташламам, йәнем, ташламам,
Дошман һүҙҙәре менән.
Сылтырап аҡҡан шишмәнең
Аҫты дарья булмаһын.
"Һөйәм, һөйәм!" — тип әйтәһең,
Һөйөүең хәйлә булмаһын.
Еккән атым — ерән ҡашҡа,
Дилбегәһе — ал таҫма.
Килер булһаң, йә, кил дә ҡуй,
Килмәҫ булһаң, алдашма.
Алмағастың ағасынан
Ҡашыҡ юндым мин һиңә.
Ун алтыла, ун етелә
Ғашиҡ булдым мин һиңә.

Йәшел дуға, серәкәй ҡуна,
Серәкәй түгел, күгәүен.
Хоҙай насип иткән булһа,
Мин булырмын кейәүең.
Алманы ашатырҙар,
Ашама, яныҡайым.
Хәйлә менән ташлатырҙар,
Ташлама, яныҡайым.
Зәңгәр күлдәктең зәңгәре,
Үтә күренә тәндәре.
Ҡисә генә һурып үптем —
Ҡилә алма еҫтәре.
Бейек тауҙың баштарында
Ҡара урман микән ни?
Алһыу йөҙҙәреңә ҡарап,
Һарғайырмын микән ни?
Уфа тигән тау араһы —
Имән менән шау ҡайын,
Ташламам, тигән һүҙем бар,
Ташламам, яныҡайым.
Атты екһәң, ек ерәнен,
Ялы ергә тейгәнен.
Егеттең йөҙө һарғая,
Алалмаһа һөйгәнен.
Алма баҡсаһына инеп,
Алһыу алма киртәмен.
Алһыу алмаға оҡшаған
Йәнем, һинең биттәрең.
Ана килә автомобиль,
Тейәгәндәр пат(ы)рон.
Шулайятҡа ҡалыр микән
Минең һөйгән матурым?
Тал бөгөлә, тал бөгөлә.
Ниңә бөгөлә икән?
Һеҙҙең өсөн беҙҙең эстәр
Ниңә өҙөлә икән?
Аҡбуҙ аттарымды менеп,
Эсерә барам ҡойоға.
Унда һине күрмәй ҡайтһам,
Күңелдәрем бойоға.
Абау, Алла, йөрәгемдең
Яныуынан йөҙәнем.
Гелән былай яныр булһа,
Ни хәл итеп түҙәрем?
Аллы һинең яулығың,
Гөллө һинең яулығың.
Һалҡын ғына һөйләшәһең,
Юҡмы әллә һаулығың?
Һыу өҫтөнән ағып килә
Сүбәк әллә күбекме?
Күп эҙләнем, табалманым,
Йәнем, һинең кеүекте.
Йәнем, ал итер инең,
Йәнем, гөл итер инең.
Һандуғасҡай булһаң әгәр,
Бер килеп китер инең.
Әйҙә, иркәм, уйнап ҡал,
Уйһыу ергә еткәнсе.
Таңдар атыр, Сулпан ҡалҡыр,
Беҙ ай(ы)рылып киткәнсе.
Йәнекәйем, сәсең бөҙрә,
Уҡа кәрәк үрергә.
Интизарҙар булдым инде
Нурлы йөҙөң күрергә.
Ағиҙелгә төшһәм, иркәм,
Тартһана беләгемдән.
Тамыр йәйгән гөлдәр кеүек,
Сыҡмайһың йөрәгемдән.
Һыу буйҙарын буйлай торғас,
Туңдым, йәнем, туның бир.
Сит илдәргә китәм инде,
Бәхиллеккә ҡулың бир.
Был күлдәкте ниңә алдың,
Ҡөн дә һөйөп киймәгәс?
Йәш күңелде ник аҙҙырҙың,
Ихлас менән һөймәгәс?
Алмас менән киҫәләр
Тәҙ(е)рә быялаһын.
Ҡил, яныйым, яныма ултыр,
Ҡемдәрҙән ояլаһың?

*Яугир сәсән Мөхәмәтшакир Яҡуповтың ижади мираҫы өлгөләрен баҫмаға М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының Фольклор үҙәге етәксеһе профессор Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ әҙерләне.*